Хәҙрәт вәғәзе

# ХӘҘРӘТИ ҒӨМӘРҘЕҢ МОСОЛМАН БУЛЫУЫ

Хаттаб улы Ғөмәр бер нимәнән дә ҡурҡмай торған, шәфҡәт һәм мәрхәмәттең нимә икәнен белмәгән ҡаты йөрәкле әҙәм булған. Ислам һәм мосолмандарҙың иң ҙур дошмандарының береһе ине. Туғандары араһынан мосолман булған кешеләргә сикһеҙ ҙур ғазаптар килтереүҙән дә тартынмаған. Ул бер меҫкен ҡатын-ҡыҙҙы мосолман булғаны өсөн көн һайын арып хәлдән тайғансы туҡмаған һәм былай тип әйткән: “Һине йәлләп түгел, бары тик арығаным өсөн генә туҡтайым”. Был ҡатын-ҡыҙ ҙа унан һис ҡурҡмайынса: “Һин ҡылған эштәреңә үкенмәһәң, Аллаһы Тәғәләнең берлегенә инанмаһаң, Аллаһы Тәғәлә һиңә ҡаты язалар бирәсәк”, - тип яуап биргән. Бер көндө Ҡурайш ҡәбиләһенең танылған кешеләре йыйылышында Исламды бөтөнләй юҡ итергә, Пәйғәмбәребеҙҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үлтерергә ҡарар итәләр. Ләкин был бик ҡурҡыныс эш була. Был эшкә кем баҙнат итер? Ғөмәр шунда уҡ атылып уртаға сыға. “Был эште миңә бирегеҙ! Уны мин башҡарасаҡмын”, - ти. Ҡылысын ҡулына алып юлға сыға. Юлда Ғөмәргә бер кеше осрай. Ул Ғөмәрҙең яуыз ҡараштарынан ҡурҡып былай тип һорай: “Былай ҡылыс тотоп ҡайҙа йүнәлдең?”. Ғөмәр: “Мөхәммәтте үлтерергә барам”, - тип яуап бирә. Теге кеше бының ҡатмарлы эш булыуы тураһында, Мөхәммәтте уға ышаныусылар күҙ ҙә йоммай һаҡлауҙары тураһында әйткәс, Ғөмәрҙең быға бик асыуы килә. Ул: “Әллә һин дә уларҙың кешеһеме? Улай булғас иң тәүҙә һине юҡ итәм”, - тип ҡылысына тотона. Теге кеше былай тип яуап бирә: “Иң элек һин үҙеңдең ғаиләңә ҡара. Һеңлең дә, кейәүең дә Ислам ҡабул иттеләр”. Быны ишетеп Ғөмәрҙең тағы ла нығыраҡ асыуы килә. Ул тиҙ генә һеңлеһе өйөнә йүнәлә. Ул килеп кергәндә Ҡөрьәндең яңы бер сүрәһен уҡып ултырған булалар. Ғөмәр быны ишек төбөндә тыңлап тора. Өйҙәгеләр Ғөмәрҙең килгәнен күргәс, Ҡөрьән яҙылған биттәрҙе йәшереп ҡуялар. Өй эсенә кергән Ғөмәр уларҙың нимә уҡыуҙары тураһында һорай. Һеңлеһе: “Беҙ бер нимә лә уҡымайбыҙ”, - тип яуап бирә. Ғөмәр бик ныҡ асыуланып: “Тимәк, ишеткәндәрем дөрөҫ икән”, - тип кейәүгә өҫтөнә ташлана. Уны йығып аяҡтары менән тапай башлай. Һеңлеһе ирен ҡотҡарыр өсөн араларына кермәк була, ләкин Ғөмәр уны ла һуғып йыға. Һеңлеһенең йөҙө һәм күҙҙәре ҡанға бата. Әммә йөрәге иман нуры менән тулған һеңлеһен Ғөмәрҙең был йыртҡыслығы һис кенә лә ҡурҡытмай. Һеңлеһе бөтөн көс-сөн йыйып, уға ҡысҡыра: “Ғөмәр, һин нимә эшләһәң дә эшлә - teләһәң, беҙҙе турап бөтөр, беҙ һинән ҡурҡмайбыҙ! Беҙ мосолман булдыҡ. Бәлки беҙ үлербеҙ ҙә, әммә Исламдан бер ҡасан да ваз кисмәйә-сәкбеҙ!”.

Ҡанға батҡан һеңлеһенән был һүҙҙәрҙе ишеткән Ғөмәр башта бер нәмә лә аңламай. Һеңлеһенең көслө иманы уны уйға һала. Ул уларға былай тип мөрәжәғәт итә: “Һеҙ нимә уҡый инегеҙ?”. Йәшерелгән Ҡөрьәндең биттәрен Ғөмәргә бирҙеләр. Ғөмәр аяттарҙы иғтибар менән уҡый башлай. Аяттарҙың мәғәнәләрендәге бөйөк ололоҡ, киңлек, илаһи зауыҡ һәм гүзәллек ҡаршыһында Ғөмәр ҡапыл үҙгәрә. Уның ҡаты йөрәге эреп, хәҡиҡәтте аңлай башлай. Хәҙер ул бөтөнләй икенсе кешегә әйләнә. “Мин дә инандым, Аллаһтан башҡа илаһ юҡтыр. Тағын шуға инандым: Мөхәммәт уның ҡоло һәм илсеһелер”, - ти. Шул саҡ мосолман булды. Ғөмәр ҡапыл аяғына ҡалҡты, имандан күскән яңы бер рух менән Пәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өйөнә юлланды. Барып ишеген ҡаҡты. Ҡылыс менән килгән сәбәпле, уға ишек асырға теләмәнеләр. Ғөмәр кеүек үк ҡурҡыуҙы белмәҫ, уның кеүек көслө Хәмзә лә унда ине. “Ғөмәрҙе тотҡарламағыҙ, эскә инһен. Яҡшы маҡсат менән килгән булһа, яҡшы булыр, насар ниәт менән килһә, мин уның башын үҙ ҡылысы менән киҫеп ташлармын” - тине ул.

Ишек асылды. Өй эсендә Ғөмәрҙе Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡаршы алды һәм көләмһерәп кенә һорап ҡуйҙы: “Ниндәй йомош менән килдең?”, “Ғөмәр Пәйғәмбә-ребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тауышын ишеткәс, аптырап, тетрәнеп китте. Хөрмәт менән: “Мосолман булырға килдем”, - тине. Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) “Аллаһу Әкбәр!” - тине һоҡланды. Унда булған бар мосолман ҙа бер тауыштан тәкбир әйттеләр. Был тәкбир тауышы Мәккә тауҙарына тиклем барып етте. Мосолмандарҙы был хәл бик шатландырҙы. Потҡа табыныусылар уйға ҡалдылар.

Ғөмәрҙең тормошонда Ислам ҡабул итеүе менән күп нәмә үҙгәрҙе. Быға тиклем Ҡәғбәлә ғибәҙәт ҡыла алмаған мосолмандар, ул көндө Пәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән бергә Ҡәғбәгә килделәр. Бынан һуң мосолмандар унда ҡурҡмайынса намаҙ уҡый башланылар.

Хәҙрәти Ғөмәр Ислам өсөн бөйөк эштәр башҡарҙы.

# ЙОМА КӨН ҺӘМ УНЫҢ ӨҪТӨНЛӨКТӘРЕ

Кәмселектәр һәм кемдең тәбиғәтенә һалынған, гонаһтарҙан да бер кем азат түгел.

Бәндәләрҙең хаталарын кисереү, тәүбә итә белгәндәрҙең гонаһтарын ярлыҡау, әжер-сауаптарын күберәк биреү өсөн Аллаһы Тәғәлә төрлө мөбәрәк көндәр һәм кистәр булдырған. Йома - ошо мөбәрәк көндәрҙең береһе.

Йома көн, тип өйрәтә дин, мосолмандарҙың был фани донъялағы һәм әхирәттәге байрам көнө. Ғибәҙәттәре көсәйтеп, нәсихәттәргә ныҒыраҡ иғтибар итеп, иманды ла нығытып ала торған көн. Әммә ял көнө түгел.

Был көндө Әҙәм, ғәләйһиссәләм, яралтып бар ителә, йома көндө йәннәткә урынлаштырыла, йома көндө унан ҡыуып сығарыла.

Пәйғәмбәребеҙ әйткән: “Әгәр ҙә мосолман был көндө яҡшы итеп йыуынып йома намаҙына барһа, уның был аҙнала эшләгән бөтә гонаһтары ярлыҡаныр, намаҙға барған ваҡыттағы һәр аҙымы өсөн уға әжер-сауаптар бирелер.

Әгәр ҙә кеше йома намаҙынан һуң “Әл-Ихлас” (Ихласлыҡ), “Әл-Фәләҡ” (Таң) һәм “Ән-Нәс” (Кешеләр) сүрәһен ете тапҡыр уҡып сыҡһа, был кешене Аллаһ аҙна буйына төрлө бәлә-ҡазаларҙан һәм бәхетһеҙлектәрҙән һаҡлар”, - тигән.

Йома көндө, тип өйрәтә дин, йәндәр бергә йыйылып әңгәмә ҡора. Был көндө бөтә кешеләрҙең ҡәбер ғазаптары туҡталып тора һәм мөъминдәр өсөн улар яңынан башланмай ҙа. Йома көндө һәм йомаға ҡаршы төндә үлеп ҡалған иманлы бәндәләр ҡәбер ғазаптарын күрмәй.

Ижтимағи тәрбиә - дин тәғлимәтенең төп нигеҙе. Бергәләп намаҙ уҡыу - мосолмандарға үҙ диндә, үҙ әҙәбендә, үҙ юлында ныҡ тора алыу өсөн көс биреүсе изге бер ғәмәл.

“Әгәр ҙә кем дә булһа берәүҙең мәсеткә йөрөп ғәҙәтләнгәнен күрһәгеҙ, был кешенең иманлы булыуына ла геүаһлыҡ бирегеҙ”, - тигән пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм.

Ҡөрьән өйрәтә: “Мәсеттәргә барып йөрөгән кеше Аллаһҡа иман килтергән кеше була”, - ти.

Тимәк, мәсеттәргә барып йөрөү, йәмәғәт намаҙы менән уның эсен йәнләндереп тороу - мосолмандың төп вазифаһы.

“Ҡала йәки ауыл ситендә йәшәгән өс кеше әгәр ҙә намаҙҙы йәмәғәт менән уҡымай икән, шайтанға уларҙы берәм-берәм үҙ уҡығыҙ! - тигән пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм. - Бүре лә бит һарыҡтың көтөүҙән ҡалғанын ғына тотоп ашай”.

Йәмәғәт менән үтәлергә тейешле ғибәҙәт булараҡ, йома намаҙы Мәккә ҡалаһында уҡ фарыз ителә, әммә унда намаҙҙы бергәләп уҡырға мөмкинлек булмай.

Һижрәт менән Мәҙинәгә килгәндә пәйғәмбәребеҙ әсәһе Әминәнең туғандары йәшәгән Ҡөбә ауылында туҡтала һәм дүрт көн дауамында Ислам донъяһындағы беренсе мәсеттең нигеҙен күтәрә. Дүшәмбелә килеп, йомаға тиклем ауылда торғандан һуң Мәҙинә ҡалаһына йүнәлә. Намаҙ ваҡыты еткәс, юлда туҡталып күп кеше ҡатнашлығында Ислам донъяһында тәүге йома намаҙын уҡый. Хөтбә һөйләп, Ислам хөкөмдәрен асыҡ итеп аңлата:

- Эй, йәмәғәт! - ти. - Үлем килгәнсе ҡылған гонаһтарығыҙ өсөн тәүбәгә килеп өлгөрөгөҙ. Мөмкинлегегеҙ бар ваҡытта игелекле эштәр эшләп ҡалығыҙ. Аллаһты хәтерҙә генә тотоу, зекер итеү һәм кешегә күрһәтеп тә, күрһәтмәй генә лә саҙаҡалар биреп тороу ярҙамында Уның менән мөнәсәбәттәрегеҙҙе төҙәтегеҙ. Шул ваҡытта ғына һеҙ ҡулдан ысҡынған мөмкинлектәрегеҙҙе яңынан ҡайтарып, йыйыр ризыҡтарығыҙҙы табыу өсөн Унан ярҙам да көтә алаһығыҙ: йылдың ошо айында, ошо урында Аллаһ һеҙгә Ҡиәмәткә тиклем йома намаҙын фарыз итте. Уны инҡар итмәй, тейешле дәрәжәлә иғтибар биреп йома намаҙын уҡымаған кеше - мин йәшәгән йылдарҙа булһынмы, минән һуңмы - барыбер осон осҡа ялғап йәшәй алмаҫ.

Кеше өсөн йома йәки тәүбә намаҙынан да олораҡ намаҙ юҡ, Аллаһ ул тәүбә итә белгәндәрҙең генә доғаларын яуапһыҙ ҡалдырмай.

- Эй, кешеләр! - ти ул. - Иҫәнимен сағығыҙҙа әхирәт тормошона әҙерләнегеҙ. Һәр берегеҙ үләсәк һәм үҙенең көтөүен - ғаиләһен, балаларын - ҡараусыһыҙ ҡалдырасаҡ. Шул ваҡытта Аллаһ бер кемдең ярҙамына арҡаланырға мөмкинлек ҡалдырмай күҙегеҙгә туп-тура ҡарап әйтер:

- Ислам килеп, Минең хөкөмдәрҙе һеҙгә тапшырманымы, Һиңә игелек эшләп Мин мал-мөлкәт, милек бирҙем, хөрмәт күрһәтеп, рәхмәтемдән ташламаным, ә һин нимә алып килдең, - тиер.

Быңдай һорау бирелгән кеше уңында ла, һул яғында ла бер нәмә лә тапмаҫ, алға ҡараһа ғына йәһәннәмде күрер. Шулай икән уяныып күҙегеҙҙе асырға ваҡыт...

...Йәшәгән йылдарында хөрмә емешенең яртыһын ғына биреп булһа ла үҙен уттан һаҡлап ҡалырға мөмкинлек тапмаған кеше яҡшы һүҙе, татлы теле менән булһа ла игелек эшләргә тырышып ҡалһын. Сөнки бер игелеккә ун тапҡырҙан башлап 700-гә тиклем арттырып әжере бирелер. Һеҙгә Аллаһтың сәләме һәм рәхмәт бәрәкәттәре булһын! - ти.

Был уның беренсе хөтбәһе була.

Исламдың игелекле тәбиғәтен аңлатып биргән тағы ла бер хөтбә һөйләй ул:

- Аллаһҡа - дан, тимен, Уға шөкөр итәм, Уның ғына ярҙамын һорайым. Насар ғәҙәттәрҙән ҡотолоу, күңелебеҙҙе яманлыҡтан таҙартыу хаҡында ярҙам һорап, Аллаһтың үҙенә генә тәүәккәлләйем. Аллаһ үҙе хаҡ юлға төшөргәндә бер кем дә аҙашыуға алып бара алмай.

- Аллаһтан башҡа Илаһи юҡ! - тип геүаһлыҡ бирә. Һүҙҙәрҙең иң яҡшыһы - Аллаһ һүҙе. Күңелен иманһыҙлыҡтан ҡотҡарып һәм Ҡөрьән хикмәттәре менән хаҡ юлға - һидайәткә төшөрөлгән, Ҡөрьән һүҙҙәрен башҡа бөтә һүҙҙәрҙән өҫтөн күрә белгән кеше ҡотолоу таба. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Аллаһ Китабы иң гүзәл, иң нәфис һүҙҙәрҙән тора. Аллаһ һөйгәнде һеҙ ҙә һөйөгөҙ! Аллаһ һүҙҙәре күңелегеҙгә һағыш һала күрмәһен. Аллаһ һүҙҙәре үҙе һайлап алғандар араһында иң лайыҡлылары булған пәйғәмбәрҙәр һәм өгөт-нәсихәттәр тарихынан иң гүзәлдәре хаҡында хәбәр бирә. Һеҙ Аллаһуға буйһоноғоҙ, Уға ғына хеҙмәттә һәм ғибәҙәттә булығыҙ. Бер кемде лә Уға тиңдәш тотмағыҙ. Аллаһ һүҙҙәре менән бергә бер-берегеҙҙе лә ихтирам итегеҙ.

Мосолман аҙна буйы доғанан һәм намаҙҙан айырылмай. Йома көндө ул Аллаһҡа яҡынлығын тағы ла көсәйтеп ебәрә. Ғибәҙәт менән бергә Ислам хөкөмдәрен халыҡҡа аңлатып биреү мөмкинлеге ала.

Дин юлында нәсихәт, дин хөкөмдәрен белергә тырышыу, белеү - һәр кемдең иң мөҡәддәс бурысы.

Ибн Ғүмәр риүәйәт итеп ҡалдырған хәҙистә пәйғәмбәребеҙҙең: Һеҙҙең һәр берегеҙ - көтөүсе, һәр кем үҙ көтөүе өсөн яуап бирә. Дәүләт башлығы үҙенең дәүләте, халҡы өсөн яуаплы; ир кеше үҙенең ғаиләһенә көтөүсе, ғаиләһе өсөн яуаплы; ҡатын кеше иренең өйөндә хужа, өйөн тәртиптә тота; хеҙмәтсе хужаһының мал-мөлкәтенә һаҡсы, уны имен тотоу өсөн яуаплы”, - тигән һүҙҙәрен килтерә. Һәм тағы ла: “Ир кеше үҙ атаһының малына көтөүсе”, - тип тә өҫтәй”.

Яуаплылыҡ ул - ҙур нәмә.

Тапҡаныңды ашап-эсеп кенә йөрөмәҫкә, малдың да ғаиләндең дә, ил именлегенең дә ҡәҙерен белергә өйрәтә дин. Берәүҙәр сүплектәрҙә ҡаҙанып йөрөгәндә, икенселәрҙең малдың да, ғүмерҙең дә ҡәҙерен китәреп йөрөүен динебеҙ хупламай.

Йома намаҙына кешеләр бер-береһен хөрмәт итеп, осрашып алыу өсөн йыйыла. Йыуынып, иң таҙа кейемдәрен кейеп, хушбыйҙар һөртөнөп килә.

Эшләп йөрөгән еренән ашыга-ашыга намаҙға йүгерергә ҡушмай дин.

Йома көндәрендә ғәрәптәр ҙә йыш ҡына эшләп йөрөгән ерҙәренән, Мәҙинә тирәһендәге биҫтәләрҙән эҫе ҡояш аҫтында тиргә һәм саңға батҡан хәлдә мәсеткә йыйыла торған була. Берәү хатта пәйғәмбәребеҙ, ғәләйһис-сәләм, эргәһенә үк килеп инә.

Шул ваҡыт пәйғәмбәребеҙ:

- Бындай көндө һеҙ йыуынып та йөрөһәгеҙ ине, тип уны киҫәтеп тә алды, - тип хәтерләр булған Ғәйшә инәбеҙ.

Әбү Һөрәйрә әйтеп ҡалдырған бер хәҙистә пәйғәмбәребеҙҙең халыҡ алдына сығып: “Был көндөң Аллаһ ҡолдары - мөъминдәр ҡылған доғаларҙың Аллаһ тарафынан ҡабул ителә торған бер мәле бар, - тип ҡулдары менән киҫкен хәрәкәт яһап, был мәлдең бик ҡыҫҡа булыуын аңлатып та бирҙе”, - тигән һүҙҙәре килтерелә.

Һәр намаҙҙағы һымаҡ йома намаҙында ла бәндәнең бөтә иғтибары ғибәҙәттә булырға тейеш, тип өйрәтә дин. Сөнки был ваҡытта ул Аллаһ ҡаршыһына баҫа, Уның үҙе менән әңгәмә ҡора. Был әңгәмәне бер нәмә бүлдерергә тейеш түгел.

Дин тарихынан бер сәхифә.

Мәҙинәлә ҡаты аслыҡ һөргән бер мәлдә йома намаҙы ваҡытында мал һәм ризыҡ тейәп Шамдан ҡайтҡан каруан ҡалаға килеп инә. Халыҡҡа хәбәр биреп барабандар ҡағыла.

Мәсеттә намаҙҙа торған мөъминдәрҙән күптәр малдан ҡоро ҡалыуҙан ҡурҡып, каруанға ҡаршы йүгерә. Пәйғәмбәребеҙ менән Бергә ун ике кеше тороп ҡала. Шул ваҡыт әҙәпһеҙлектән киҫәтеп, Ҡөрьән уларға оло һабаҡ бирә.

“Аллаһ хозурында булған нәмәләр - күңел асыу менән сауҙаға бирелеүҙән яҡшыраҡ. Аллаһ үҙе лә - өлөшөгөҙҙө биреүселәрҙең иң яҡшыһы”, - ти.

Ҡөрьән өйрәтә: “Эй, мөъминдәр! - ти. - Әгәр ҙә йома көндө намаҙға саҡырып аҙан әйтелһә, бөтә эштәрегеҙҙе, сауҙаларығыҙҙы ташлап тороп, Аллаһты зекер итеү өсөн намаҙға, вәғәҙ тыңларға ашығығыҙ! Белгегеҙ килһә, һеҙҙең өсөн был хәйерлерәк!

Әммә намаҙ тамамланыу менән ерҙә төрлө тарафтарға таралып, Аллаһтың рәхмәтен кәсеп итегеҙ. Эштәрегеҙ уңышлы барһын тиһәгеҙ, Аллаһты ла зекер итеп кенә тороғоҙ!”.

Мәҙинәгә килеү менән пәйғәмбәребеҙ мосолмандарҙы бергә туплаулыҡ бер йәмәғәт ойоштороу хәстәрлеген күрә башлай. Тиҙ арала ғына мәсет төҙөп ҡуйыу ҙа ҡәрҙәшлек элемтәләрен тағы ла нығыта төшә.

Аллаһ йортонда йыйылып биш ваҡыт намаҙ уҡыуҙар мосолмандарға үҙҙәрен бер бөтөн булараҡ хис итергә мөмкинлек бирә.

Милләтенә, мал-мөлкәтенә, ҡайҙан килеүенә, дәрәжәһенә һәм йәмғиәттә тотҡан урынына ҡарап бәндәләрҙе бүлеп йөрөтөү тигән нәмәгә бөтөнләй урын ҡалмай. Мосолмандар йәшәгән ерҙәрҙә, ҡала һәм ауыл төҙөлөштәрендә лә Исламға ғына хас йүнәлештәр ныҡлы урын ала: уртала мәсет ҡалҡып сыға, мәсет тирәләй өйҙәр төҙөлә.

“Ғасры сәғәҙәт”тә, йәғни Ислам дине майҙанға сығып көүәт тапҡан быуатта мәсеттәр инде йыйылышып төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеү урыны ла, мәҙрәсә лә, дауахана ла, ял урыны ла булып китә.

Пәйғәмбәребеҙ әйткән: “Әлбиттә, йома намаҙы еңел түгел әммә ләкин был намаҙ өсөн әжер-сауаптарҙың күпме булыуы белһәгеҙ, мәсеткә һеҙ шыуыша-шыуыша булһа ла барырға тырышыр инегеҙ. Мәсеттә йома намаҙындағы беренсе рәт фәрештәләр сафына оҡшаш. Әгәр ҙә һеҙ беренсе рәттә тороуҙың игелеген белә алһағыҙ, унда урын алып ҡалыу өсөн кем уҙарҙан йүгереп, ашыға-ашыға барыр инегеҙ.

Йәмәғәт менән уҡылған намаҙҙың әжер-сауабы, яңғыҙ уҡылғанға ҡарағанда һәр ваҡыт күп тапҡырға олораҡ. Йома намаҙында кеше ни тиклем күп ҡатнашһа, Аллаһы Тәғәләнең уларға ҡарата булған ризалығы ла шул тиклем күберәк буласаҡ”, - тигән.

***“Башҡортса дини календарь” китабынан алынды.***